# Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр

Мәҡәл һәм әйтемдәрҙә халыҡ үҙенең быуаттан-быуатҡа һуҙылған тормош тәжрибәһен, тапҡыр аҡылын, яҡшылыҡҡа булған ынтылышын сағылдырған. Улар тормошта осрай торған күренештәрҙе күҙәтеү нигеҙендә барлыҡҡа килгәндәр. Афористик жанрҙар үҙҙәренең тәбиғәте менән күп яҡлы, улар халыҡтың һөйләү телмәрен биҙәү, уның тыңлаусыға тәьҫир көсөн арттырыу өсөн ҡулланылалар.
Мәҡәл — халыҡ ижадында тормош тәжрибәһенән сығып, ыҡсым ғына итеп әйтелгән тәрән мәғәнәле тапҡыр һүҙ.
Әйтем — һамаҡлап әйтелгән һүҙ; башҡорт фольклорында тормоштоң айырым бер күренешенә ситләтеп, кинәйәләп йәки образлы итеп баһа биргән тотороҡло һүҙбәйләнеш; составы һәм төҙөлөшө тотороҡло булған, мәғәнә яғынан бер бөтөн әҙер телмәр берәмеген тәшкил иткән, лексик яҡтан ойошҡан һүҙбәйләнеш.

## АҢ-БЕЛЕМ ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Белемле ҡыҙ - бирнәле ҡыҙ
Белемлегә йот юҡ, белемһеҙгә ҡот юҡ.
Белмәгәндең беләге тыныс.
Белмәү ғәйеп түгел, белергә теләмәү - ғәйеп
Белгән белгәнен эшләр, белмәгән беләген тешләр.
Белгән — юлда, белмәгән — түрҙә.
Белгәнгә — ер, белмәгәнгә — гүр.
Белмәгән белер, белмәгәндән көлөр.
Белмәгән эшкә ҡатышма.
Белмәгән эштән шайтан көлгән.
Белмәгәндең беләге тыныс, белгәндең ике ҡулына ла көс.
Белмәгәндең беләге тыныс, белгәндең йөрәге тыныс.
Белгәнгә — яңылыш, белмәгәнгә — нағыш.
Көслө кеше берҙе еңер, белемле кеше меңде еңер.
Белемле кеше юғалмаҫ.

## ХЕҘМӘТ ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Һөнәрлененң ҡулы алтын.
Ҡулың оҫта булһын, һүҙең ҡыҫҡа булһын.
Ҡулы белгән бал ашар.
Сәмле эш - йәмле эш.
Белгән белгәнен эшләр, белмәгән беләген тешләр.
Эшһеҙ кеше - көсһөҙ кеше.
Буй эшләмәй, ҡул эшләй.
Эше барҙың ашы бар.

Ҡалған эшкә ҡар яуыр.
Ете ҡат үлсә, бер ҡат киç.
Кем эшләмәй, шул ашамай.
Эшләгәнең кешегә, өйрәнгәнең үҙеңә.
Аҙ һөйлә, күп эшлә.
Тырышҡан табыр, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр.
Эшең һәм аҡылың барҙа һаулығыңа үлем булмаç.
Эшләгән - тапҡан, ауыҙына ҡапҡан.
Эшләгәнгә эш ҡарышмай.
Эш араһында эш бөтә.
Эш белмәгән эш өçтөндә үлгән.
Эш белмәйенсә, аҡыл белмәçһең.
Эш беләктә түгел, йөрәктә.
Эш бөтмәй йән тынмай.
Эш иплене ярата.
Эш кемдеке — беләк шуныҡы.
Эш кешене кеше итер.
Эш менән үткән ғүмер — алтын ғүмер.
Эш оçтаһынан ҡурҡа.
Эш үҙе өйрәтә.
Эш һөйгәнде ил һөйгән.
Эш һөйгәндең дәрәжәһе артыр, эшлекһеҙлек боҙоҡлоҡҡа тартыр.
Эш һөймәгән көн итмәç (күрмәç).
Эш һөймәçте ил һөймәç.
Эш эшләгән интекмәç, эшләмәгән көн итмәç!
Эш эшләнгәс — ирмәк, бөтмәй ҡалһа — имгәк.
Эш яратҡан — уңған, яратмаған — туңған.
Эше барҙың ашы бар, эше юҡтың ашы юҡ.
Эше ҡаты, икмәге татлы.
Эше юҡтың ҡәҙере юҡ, ҡәҙере юҡтың ҡәбере юҡ.
Эшең бер булһын, берәгәйле булһын.
Эшең булһа йөҙ, туҡлыҡлы килер көҙ.
Эшең кире китһә, эше алға барғанға кәңәш ит.
Эшең ҡаты булһа, тешеңә йомшаҡ булыр.
Эшең теүәл булмаһа, кешегә күрһәтмә.
Эшеңде башлар алдынан аҙағын уйла.
Эшеңде кешегә тапшырма.
Эшеңде эш иткәс кенә маҡтан.
Эшкә теләк булһа, беләк сыҙар.

Эшкә ялҡау (бала) һабаҡҡа аңҡау булыр.
Эшкә булһа — «алла, башым», ашҡа булһа — «ҡайҙа ҡашығым?»
Эшләгәндә йөрәгең елкенһен, ашағанда ҡолағың һелкенһен
Эшләгәндән кеше үлмәй.
Эшләмәй тамаҡ туймай.
Эшләмәйенсә ашап булмай, ашамаһаң йәшәп булмай.
Эшләнгән эш иргә ҡот, яҡшы эшләнһә, илгә ҡот.
Эшләргә иренгән — ашарға тилмергән.

## ТЕЛ ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Теле ямандың көнө яман.

Һөйҙөргән дә тел, биҙҙергән дә тел.

Телдең күрке - һүҙ.

Татлы тел таш ярыр.

Теле барҙың иле бар.

Теле оҫта, ҡулы ҡыҫҡа.

Тел менән тирмән тарттырып, онло булып булмай.

Тел менән һөйләгәнсе, ҡул менән эшләп күрһәт

Тел һөйләй, ҡул эшләй.

Телеңдән килгән ҡулыңдан килһен.

Телең һөйләһен, ҡулың эшләһен.

Телеңде бәйләп ҡуй ҙа, ҡулыңды эшкә ҡуш.

Телеңә таянма, көсөңә таян, көсөңә таянма, эшеңә таян.

Теленең өҫтө - һөт, аҫты - ҡорт.

Телеңә урын тапмаһаң, тешеңә ҡыҫтыр.

Телеңде теш артында тот, ҡолағыңды киҫмәһен.

Теле боҙоҡтоң күңеле боҙоҡ.

Яман кешенең теле әсе.

Көйҙөргән дә - тел, һөйҙөргән дә - тел, көлдөргән дә - тел ,бөлдөргән дә - тел.

Ике тапҡыр уйла, бер тапҡыр һөйлә.

Тел менән һөйләгәнсе, ҡул менән эшләп күрһәт.

Әсә теле бер була.

Иләк һорарға ла тел кәрәк.

Аҙ һөйләһәң, күп ишетерһең.

Аҙ һөйлә - күп эшлә.

Аҡылы ҡыҫҡаның теле оҙон.

## БАЛАЛАР ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Бала бар ерҙә батша юҡ.
Бала - ата-инәгә алтын бағана.
Бала ҡәҙерен әсә белер, ил ҡәҙерен ир белер.
Бала күрмәгән - балдан ауыҙ итмәгән.
Бала ҡарынында саҡта - эсеңә ауыр, өйҙә саҡта - башыңа ауыр, ситкә китһә - йәнеңә ауыр.
Балалы тормош - мең хәсрәт, балаһыҙ - бер хәсрәт.
Балаһыҙ кеше кеше һөйләр, балалы кеше балаһын һөйләр.
Баланан бәхетең булһа - ҡарт көнөңдә йәш итер,
Баланан бәхетең булмаһа - иртә йәштән ҡарт итер.
Балһыҙ гөлгә ҡорт ҡунмаҫ, балаһыҙ йортҡа ҡот ҡунмаҫ.
Ул – һөйөнөс, ҡыҙ – ҡыуаныс.
Ир бала – йортҡа терәк.
Малайға тәрбиә биреп - ил тәрбиәләйһең,
Ҡыҙға тәрбиә биреп - милләт тәрбиәләйһең.
Ағаһын күреп, ҡусты үҫер,
Апаһын күреп, һеңле үҫер.
Ир бала атаһына таяу,
Ҡыҙ бала өй эсендә буяу.
Бала итәктә һөйҙөрә, итәктән төшһә - көйҙөрә.
Улың булһа, олоҡло менән күрше бул,

Ҡыҙың булһа, ҡылыҡлы менән күрше бул.
Ҡыҙы барҙың наҙы бар.
Ҡыҙлы йорт – нурлы йорт.

## ҺҮҘ ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Яҡшы һүҙ балдан татлы.
Әҙерәк һөйләһәң, күберәк ишетрһең.
Яҡшы һүҙ – йән аҙығы.
Йылы көн ҡарҙы иретер, йылы һүҙ йәнде иретер.
Яҡшының үҙе яҡшы, үҙенән һүҙе яҡшы.
Уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә.
Ышанма кеше һүҙенә, ышан үҙ күҙеңә.
Һүҙе ямандың үҙе яман.
Бер әйткәнде ике әйтмә.
Үҙең ишетке килмәгән һүҙҙе кешегә һөйләмә.
Ауыҙың ни әйткәнде ҡолағың ишетһен.
Ике тапҡыр уйла, бер тапҡыр һөйлә.
Һүҙҙең башынан элек төбөн уйла.
Ялған һөйләһәң - тотолорһоң, дөрөҫ һөйләһәң - ҡотолорһоң.
Кешенең белемен һүҙенән аңларһың.
Кешенең үҙенә ҡарама, һүҙенә ҡара.
Аҙ һөйлә - күп эшлә.
Һүҙ яраһы һөңгө яраһынан ҡатыраҡ.
Әйткән һүҙ-атҡан уҡ.
Һүҙ тейһә — ағаға, уҡ тейһә боғаға.
Һүҙенә күрә яуабы, саҙаҡаһына күрә сауабы
Һүҙенән ҡайтҡан - ир түгел
Һүҙ күп ерҙә эш аҙ булыр.
Һүҙ менән түгел, эш менән күрһәт.
Һүҙ һөймәгән тирмән ҡорған.
Һүҙең менән эшең бер булһын

## ТЫУҒАН ИЛ ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Иле барҙың – көнө бар.
Айғыр малға ни етә, йөрөй белгән кешегә; тыуған илгә ни етә, ҡәҙерен белгән кешегә.
Айырылған ил аҙыр, ҡушылған ил уҙыр.
Аҫыл кеше алтын тип үлмәҫ, илем тип үлер.

Ат әйләнеп төйәген табыр, һыу әйләнеп юлын табыр, ир әйләнеп илен табыр.
Ат туйған ерендә, ир тыуған илендә.
Алтын- көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил артыҡ.
Берҙең көнө ил менән, илдең көнө ер менән.
Берҙә түгел, илдә көс.
Биле ныҡтың – иле ныҡ, иле ныҡтың – биле ныҡ.
Данлы егет ил өсөн үлер.
Дуҫынан айырылған ете йыл илар,
Иленән айырылған ғүмер буйы илар.
Ерҙең даны ирҙән.
Ерҙең көнө ил менән, илдең көнө ер менән.
Ерҙән айырылған елгә осор.
Ере байҙың – иле байыр.
Ерһеҙ кеше — илһеҙ кеше.
Икмәк – илдән, һыу – күлдән.
Ил барҙа сәпсек үлмәҫ.
Ил барҙа, ир хур булмаҫ, ир барҙа, ил хур булмаҫ.
Иле барҙың теле бар, теле барҙың иле бар.
Ил ирекһеҙ булһа, ир күрекһеҙ булыр.
Ил көйөнгәндә көйөн, ил һөйөнгәндә һөйөн.
Ил ҡәҙерен белмәгән – башын юғалтҡан,
Ер ҡәҙерен белмәгән – ашын юғалтҡан.
Ил намыҫы хур итмәҫ.
Ил терәге – ир, ир терәге – ил.
Илгә бирһән ашыңды, ил ҡәҙерләр башыңды,
Эткә бирһәң ашыңды, эттәр талар башыңды.
Илгә ҡушылһаң – ир булырһың, илдән айырылһаң – хур булырһың.
Илдең биле ныҡ булһын, ирҙең күңеле туҡ булһын.
Илдең көнө ер менән.
Илдең эше ир муйынында, ирҙең эше ил ҡуйынында.
Илдә булһа үлмәҫһең, илһеҙ көнөң күрмәҫһең.
Иле берҙәмдең, көнө берҙәм.
Иленән биҙгән ир уңмаҫ, күленән биҙгән ҡаҙ уңмаҫ.
Ир аҡылы – бер алтын, ил аҡылы – мең алтын.
Ир булһаң, илгә таян.
Ир-егеттең аҫылы ил эшендә танылыр.
Ир-егетең яҡшыһы ил менән.
Ир илендә ҡәҙерле.
Ир терәге – ер.

Ир – тыуған ерендә, ат – туйған ерендә.
Ир яҡшыһы илгә ярай.
Ирҙең даны иленән, халҡы менән еренән.
Ирҙәр айырылһа, ил таралыр.
Киң кейем туҙмаҫ, кәңәшле ил аҙмаҫ.
Көтөү ташлаған малды бүре алыр, илен ташлаған ирҙе гүр алыр.
Күл балығы менән данлы, ил халығы менән данлы.
Мал ашаған еренә, ир тыуған еренә ҡайтыр.
Осорорға ел көслө, көрәшергә ил көслө.

## ӘСӘ ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Әсә хаҡы – тәңре хаҡы.
Әсә ҡулы – им.
Әсәһеҙ ғаилә - һүнгән усаҡ .
Әсә янында бала етем булмай.
Әсәһен ҡәҙерләгән ҡәҙерле булыр.
Ҡояш – яҡтылыҡ, әсәй – бәхетлек.
Әсәйгә бөтә балалар ҙа бер.
Әсә йөрәге ҡояштан да нығыраҡ йылыта.
Ҡош яҙға ҡыуана, бәпес – әсәйгә.
Һәр әсәгә үҙ балаһы яҡын.
Әсәйҙән дә яҡын иптәш юҡ.
Әсә күңеле балала, бала күңеле далала.
Әсәй - ҡаҙна, атай – еҙнә.
Бала ҡәҙерен әсә белер.
Телһеҙҙең телен әсәһе белер.
Үҙ әсәң бауырһаҡ, үгәй инәң — һарымһаҡ.
Атаһыҙ бала етем түгел, әсәһеҙ бала етем.
Әсә ҡуйыны тундан йылыраҡ.
Әсә йылыһы — ҡояш йылыһы.
Ағасына күрә алмаһы, әсәһенә күрә балаһы.
Бала шатлығы — әсә шатлығы.
Ата-әсә алғышы утка-һыуға батырмаҫ.
Ата-әсәһенә ҡәҙер күрһәтмәгән — үҙе лә изгелек күрмәҫ.
Баланың ғәйебе — ата-әсәнеке.
Донъяла ата-әсәнән башҡа бар нәмә лә табыла.
Астан үлһәң дә, ата-әсәңде ташлама.
Ир бала — ата-әсәгә таяу, ҡыҙ бала — өйгә яҡҡан буяу.
Атаны күреп ул үҫер, әсәне күреп ҡыҙ үҫер.

## ҺАУЛЫҠ ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛ-ӘЙТЕМДӘР

Һаулыҡ - ҙур байлыҡ.
Һаулыҡты аҡсаға һатып алып булмай.
Халыҡ һаулығы — дәүләт байлығы.
Һаҡланған - һаулыҡҡа туйған.
Һаҡланғандан үлем дә һаҡлана.
Һау кешегә көн дә байрам.
Һаулығың — байлығың.
Һәр дарыу самаһынан уҙһа — ағыу.
Тән ауырыһа, йән ҡурҡа.
Тәне һауҙың йәне һау.
Тир менән сир сыға.
Самалы ашаған һау булыр.
Саф һауа - тәнгә дауа.
Сир аяҡ аҫтында.
Сир ҡулдан йоғор, тымау - тындан.
Сирле үлмәй, әжәле еткән үлә.
Сирле, сирлене ң холҡо - кирле-мирле.
Сирлегә йәйге селләлә лә һыуыҡ.
Сирләмәйенсә һаулыҡтың, ҡартаймайынса йәшлектең ҡәҙерен белмәҫһең.
Сәләмәт тәндә - таҙа аҡыл.
Оҙаҡ ауырыу йән ала.
Кешенең дарыуы - кеше.
Йәнең һау булһа, ауырыумын тимә, тәнең һау булһа, ярлымын тимә.
Ауырыу көсәйһә, йәнеңде алыр,
Дарыу көсәйһә, малыңды алыр.
Ауырыу күрмәгән кеше һаулыҡтың ҡәҙерен белмәҫ.
Ауырыуға сыҙамаһаң, һаулыҡтың ҡәҙерен бел.
Байлыҡ башы — һаулыҡ.
Байлыҡ — бер айлыҡ, һаулыҡ — ҙур байлыҡ.
Байлыҡтың алды — тән һаулыҡ.
Паҡлыҡ һөйгән һау булыр.

## ҒАИЛӘ ҺӘМ ҒАИЛӘ МӨНӘСӘБӘТТӘРЕ ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Татыу ғаилә – ил күрке.
Кесегә мәрхәмәт ит, олоға итәғәт ит.

Ҡартты ҡәҙерләһәң, ҡартайғас ҡәҙер күрерһең.
Ололарҙы ололау – яҡшылыҡтың билдәһе.
Бер олоноҡон тыңла, бер кесенекен тыңла.
Ҡояш янында - йылылыҡ, әсә янында - изгелек.
Малайға тәрбиә биреп - ил тәрбиәләйһең,
Ҡыҙға тәрбиә биреп - милләт тәрбиәләйһең.
Ағаһын күреп, ҡусты үҫер, апаһын күреп, һеңле үҫер.
Ир бала атаһына таяу, ҡыҙ бала өй эсендә бuяу.
Бала итәктә һөйҙөрә, итәктән төшһә - көйҙөрә.
Улың булһа, олоҡло менән күрше бул,
Ҡыҙың булһа, ҡылыҡлы менән күрше бул.
Әсәһенә ҡарап ҡыҙын ҡос, атаһына ҡарап улын ҡос.
Әсәй - ҡаҙна, атай – еҙнә.
Ҡыҙы барҙың наҙы бар.
Ҡыҙлы йорт – нурлы йорт.
Ул – һөйөнөс, ҡыҙ – ҡыуаныс.
Ҡыҙҙар ярата йылы һүҙ, ҡаты әйтмә, егет,түҙ.
Иреңдән айырылғансы күкрәгеңдәге йәнеңдән айырыл.
Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә — ҡатын
Ҡатын артынан мал килер, ҡыҙ артынан дан килер.
Ҡатын ғәйрәтле булһа, ир ғибрәтле булыр
Ҡатын теләһә, ишәктән ир яһар, теләһә, ирҙән ишәк яһар.
Ҡатын һәлкәү булһа, ир ялҡау булыр.
Ҡатынды йөҙөк ҡашы иткән дә, муса ташы иткән дә — ир.
Ҡатынмын тигән ҡатында ат башындай алтын ятыр.
Ҡатынынан айырылғандың ҡанаты ҡайырылған
Ҡатын уңғаны иргә яраған, ир уңғаны илгә яраған.
Бала - ата-инәгә алтын бағана.
Бала ҡәҙерен әсә белер, ил ҡәҙерен ир белер.
Бала күрмәгән - балдан ауыҙ итмәгән.
Баланан бәхетең булһа - ҡарт көнөңдә йәш итер,
Баланан бәхетең булмаһа - иртә йәштән ҡарт итер.
Ҡыҙ байлығы - күркәм холоҡ, ир байлығы - тәүәккәл.
Ҡыҙ егеткә ҡушыла - ебәк булып ишелә.
Ҡыҙ күңелендә — балалы бишек, ир күңелендә — эйәрле ат.
Ҡыҙ оҙатҡан яланғас ҡалыр, килен алған түренә урын һалыр.
Ҡыҙҙың кемлеге кемәйенән (әхирәтенән) билгеле.
Ҡыҙыңды үҙеңдән түбәнерәккә бир, киленде үҙеңдән юғарыраҡтан ал.

## ӘҘӘП ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Әҙәмде әҙәм иткән — әҙәп.
Әҙәп барҙа оят бар.
Әҙәп барҙа иман бар, әҙәп юҡта иман юҡ.
Әҙәпһеҙҙән әҙәп өйрән.
Әҙәпкә ғәҙәтләнһәң - әҙәм булырһың, яманға ғәҙәтләнһәң - әрәм булырһың.
Әҙәпле кеше — солтан, әҙәпһеҙҙең бите — олтан.
Әҙәп булмаған ерҙә иман юҡ.
Ғәйебеңде таныу – ярты төҙәлеү.
Кесегә мәрхәмәт ит, олоға итәғәт ит.
Ҡартты ҡәҙерләһәң, ҡартайғас ҡәҙер күрерһең.
Ололарҙы ололау – яҡшылыҡтың билдәһе.
Кесегә шәфҡәт итеп юл бир, олоға хөрмәт итеп ҡул бир.
Оло кешегә изгелек күрһәтмәгән, олоғайғас үҙе лә изгелек күрмәҫ.
Оло кешене хөрмәтләһәң, хөрмәт күрерһең.
Оло һүҙен тыңламаған оролған да бәрелгән.
Ололарға хөрмәт ҡыл, кеселәргә шәфҡәт ҡыл.
Ололаһаң олоно, ололарҙар үҙеңде.
Олоно оло ит, кесене кесе ит.
Кеше холҡон күҙәт, үҙеңдекен төҙәт.
Кешегә шәфҡәт ит, уҙаманға хөрмәт ит.
Кешене хур иткән үҙе ҙур булмаҫ.

## ДУҪЛЫҠ ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Дуҫ булһаң, дуҫ ҡәҙерен онотма.
Дуҫ дуҫ өсөн мал бирер, яу килгәндә йән бирер.
Дуҫ - дуҫтың көҙгөһө.
Дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп көйрәтер.
Дуҫ килгән көн - байрам көн.
Дуҫ һөйөнһөн, дошман көйөнһөн.
Дуҫ хаҡы өсөн йән фиҙа.
Дуҫ әйтһә - ҡалма, дошман әйтһә - барма.
Дуҫты тапҡансы эҙлә,тапһаң - һаҡла.
Дуҫы күпте яу алмай.
Дуҫһыҙ кеше - ҡанатһыҙ ҡош.
Дуҫың күп булһа, дошманың үҙе үлер.
Дуҫың ниндәй - ҡәҙерең шундай.
Дуҫың янында булмаһа, донъяның йәме юҡ.

Ике яҡшы дуҫ булһа, ике аранан ҡыл үтмәҫ.
Ил өҫтөндә илле дуҫың булһын.
Кейемдең яңыһын маҡта, дуҫтың иҫкеһен маҡта.
Дуҫыңды дуҫ итә бел, эшеңде эш итә бел.
Дуҫың һуҡмағына үлән үҫтермә.
Йөҙ һум аҡса булғансы, йөҙ дуҫың булһын.
Ысын дуҫ бәхетһеҙлектә һанала.
Ағас тамыры менән, кеше дуҫтары менән көслө.
Дуҫ көлгәндә беленмәй, бөлгәндә беленә.
Дуҫ ҡәҙерен һуғышта белерһең.
Дуҫын яҡламаған яуға ҡалыр.
Дуҫ битлеген кейгән дошман хәтәр.
Дуҫ-ишле булайым тиһәң, кенә тотма.
Дуҫ күҙеңә ҡарап әйтер, дошман артыңда ғәйбәт һатыр.
Дуҫ күп булһа ла — аҙ, дошман бер булһа ла — күп.
Дуҫ менән дуҫ булғанға шатлан, дошман менән дуҫ булыуҙан һаҡлан.
Дуҫ үпкәләһә, дошман кинәнер.
Дуҫтан дошманды айыра бел.
ҡалышыу — дуҫһыҙ ҡалыу.
Дуҫтар хәтерен ҡалдырһаң, дошман хәтерен табырһың.
Дуҫтың дуҫлығы ҡара көндә беленер.
Дуҫтың дуҫлығы яуҙа беленә.
Дуҫың булһа, үҙеңдән артыҡ булһын.
Дуҫың менән дуҫ булғанға шатлан,
Дошманың менән дуҫ булғандан һаҡлан!
Дуҫың яман булһа, айбалтаң янында булһын.
Дуҫың янында булмаһа, донъяның йәме юҡ.
Дуҫыңа ат бирмә, ат бирһәң, яй йөрө, тимә.
Дуҫыңды дуҫ итә бел, эшеңде эш итә бел.
Дуҫыңдың кем икәнен юлға сыҡкас белерһең.
Егетте дуҫынан таны.
Ике йөҙлө дуҫтан дошман яҡшы.

## ИКМӘК ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Икмәк – ил байлығы.
Икмәктән оло булма.
Икмәк аша атлама.
Икмәктең валсығын да ергә ташлама.
Икмәк сәйнәмәйенсә йотолмай.

Икмәк-тоҙҙан баш тартма.
Икмәкте хурлама, ҙурла.
Икмәктән оло аш юҡ.
Ил ҡеүәте — икмәктә.
Икмәк — илдән, һыу — күлдән.
Икмәк юлда йөк түгел.

ФТ ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР.

Ат абынғанға ишәк ғәйепле
Ат аҙғыны тай була, ир аҙғыны бай була
Ат аҙғыны тайға эйәрер, ир аҙғыны байға эйәрер
Ат аҙғыны тайға эйәрер, ир аҙғыны ҡыҙға эйәрер
Ат аҙғыны тайға эйәрер, ярлы малы байға эйәрер
Ат аҙғыны юрға булыр, ир аҙғыны мулла булыр
Ат аҙғыны тай була, ир аҙғыны бай була.
Ат айғырланһа, баш була
Ат айғырланһа, үҙ башына була
Ат алмаç борон йүгән эҙләмә
Ат айҙа һыналыр, әҙәм йылда һыналыр
Ат айында, ир йылында һыналыр
Ат айында һыналыр.
Ат алғансы, тай ҙа мал.
Ат алмаç борон йүгән эҙләмә.
Ат алһаң, арба кәрәк
Ат алһаң, арба кәрәк, ҡатын алһаң, бары ла кәрәк
Ат алһаң, ауылына тартыр
Ат алһаң, ауылың менән, ауылың менән булмаһа, бүркең менән кәңәш ит
Ат алһаң, ауылыңдан алма
Ат алһаң - ауылың менән, ҡыҙ алһаң - ырыуың менән кәңәшләш
Ат алһаң, баш менән түш ал, ҡыл алһаң, ҡабаҡ менән ҡаш ал
Ат алһаң, өйөң менән кәңәшләш, ҡатын алһаң, ауылың менән кәңәшләш
Ат алһаң, һынап ал, аҡса алһаң, һанап ал
Ат алһаң, яҡындан ал, ҡатын алһаң, алыçтан ал
Ат арымаһа, аҙыҡтан
Ат арығын маҡтама, арғымаҡтан тай уҙыр.
Ат аяған ат менер, тун аяған тун кейер.
Ат аяғынан һимерер.
Ат — байҙа.
Ат барҙа бейә сапмаһын, ир барҙа ҡатын алға сыҡмаһын

Ат баҫмайым тигән еренә өс баҫа.
Ат башы менән уйнағансы, атаң башы менән уйна.
Ат башы тотҡан арымаҫ.
Ат булмағанда, ишәк тә ярай.
Ат йәлләгән ергә ҡарар, ҡош йәлләгән күккә ҡарар.
Ат күреп аяғың аҡһамаһын
Ат күрмәгән ат күрһә, саба-саба үлтерер,
Тун күрмәгән тун күрһә, ҡаға-ҡаға туҙҙырыр.
Ат асыуын арбанан алмайҙар
Ат бирҙем - атлата алманым, тай бирҙем - туҡтата алманым
Ат йөрөп юл ала
Ат ҡаҡҡанды тай ҡаҡҡан, ир ҡаҡҡанды мир ҡаҡҡан.
Ат ҡартайһа — һуғымлыҡ.
Ат менән ҡыҙҙы ауылдан алма
Ат — менгәндеке, тун — кейгәндеке.
Ат юрғалар, эйәһе дан алыр
Ат, эйәһенә килгәс, аҡһамаһын
Ат юҡ аранда, ҡайғы юҡ буранда.
Ат яҡшы ла, ел ҡаршы.
Ат яҡшыһы — ала тояҡ, тун яҡшыһы — төлкө тояҡ
Ат яҡшыһы алға сығыр, алға сыҡҡан данға сығы
Ат санала беленер.
Ат тапҡансы ишәк мен.
Ат тапҡансы эйәр тап.
Ат тапһаң, эйәр табыла.
Ат тирләһен, сирләмәһен.

## УҠЫУ ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Уҡыу - белем шишмәһе.
Уҡыу - энә менән ҡойо ҡаҙыу.
Уҡыған артҡа ҡалмаҫ.
Укыған ете ҡат ер аҫтындағын күрә, уҡымаған ер өҫтөндәген дә күрмәй.
Уҡыған ил уҙыр, уҡымаған ил туҙыр.
Уҡыған кеше хур булмай.
Укыған уғыл - атанан оло.
Уҡыған уңыр, уҡымаған туңыр.
Уҡыған үлмәҫ, уҡымаған көн күрмәҫ.
Уҡый белмәһәң дә хурлыҡ, уҡып белмәһәң дә хурлыҡ.

Уҡымаған бер телле, уҡыған ике телле.
Уҡымаған күҙлене уҡыған һуҡыр еңгән.
«Уҡыным» тимә, «белдем» тиң.
Уҡыу - күңел нуры, уҡымай ҡалған - кеше хуры.
Уҡыу ялыҡтырһа ла бил һындырмай.
Уҡыуһыҙ белем юҡ, белемһеҙ көнөң юҡ.
Уҡыһаң белерһең, уҡымаһаң бөлөрһөң

## КИТАП ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Китап – белем шишмәһе.
Китапһыҙ йорт – ҡошһоҙ урман.
Китапһыҙ өй – тәҙрәһеҙ бүлмә.
Уҡыған ил уңыр,уҡымаған ил туҙыр.
Яҡшы китап – иң ғәҙел дуҫ.
Китаптың белмәгәне юҡ.
Китап уҡыһаң – белемең артыр, уҡымаһаң - белгәнең дә онотолор.
Яҡшы китап уҡыһаң, тағы бер дуҫың артыр.

## ЯҠШЫЛЫҠ ҺӘМ ЯМАНЛЫҠ ТУРАҺЫНДА МӘҠӘЛДӘР

Яҡшы булһаң, яҡын күп.
Яҡшы егеттең аты ҡалыр, яман егеттең таты ҡалыр.
Яҡшы исем малдан артыҡ.
Яҡшы йәнеңә юлдаш, яман малыңа юлдаш.
Яҡшы кеше ай менән көндәй: бар әҙәмгә берҙәй.
Яҡшы кеше йөрөгән ерен маҡтап йөрөр; яман кеше йөрөгән ерен үртәп йөрөр.
Яҡшы кеше менән дуҫ булһаң, юлға күндерер; яман кеше менән дуҫ булһаң, юлдан яҙҙырыр.
Яҡшы кеше — муйынса ҡашы, яман кеше — мунса ташы.
Яҡшы кеше эш ыратыр, яман кеше теш ыржайтыр.
Яҡшы кешенең яҡшылығы тейер тар ерҙә; яман кешенең яманлығы тейер һәр ерҙә.
Яҡшы кеше — гәүһәр ташы.
Яҡшы күргән яҡшылығын һөйләр,
Яман күргән яҡшылығын да яман итеп һөйләр.
Яҡшы менән бергә барһаң — малға туйырһың; яман менән бергә барһаң — ярҙан ҡоларһың.
Яҡшы менән һөйләшһәң, балға шәкәр ҡатҡандай; яман менән һөйләшһәң, этҡә һөйәк атҡандай.

Яҡшы менән юлдаш булһаң — ирешерһең моратҡа; яман менән юлдаш булһаң — ҡалырһың оятҡа.
Яҡшы менән юлдаш булһаң — уңырһың; яман менән юлдаш булһаң — туңырһың.
Яҡшы менән юлдаш булһаң — эшең бөтөр; яман менән юлдаш булһаң — башың бөтөр.
Яҡшы менән яман араһы — ер менән күк араһы.
Яҡшы тыуһа, илгә ҡот, ямғыр булһа, ергә ҡот.
Яҡшы һөйләгәндә кәңәш сығыр, яман һөйләгәндә игәш сығыр.
Яҡшы эш үҙен-үҙе маҡтай.
Яҡшы әйтмәй белер, һорамай бирер.
Яҡшы әҙәм аш ашай, яман әҙәм баш ашай.
Яҡшы әҙәмдә ҡон булмаҫ; яман әҙәмдә моң булмаҫ.
Яҡшы юлдашынан беленә.
Яҡшы ялғандан яман дөреҫлөк яҡшы.
Яҡшы яңылышһа — үҙенән күрер, яман яңылышһа — кешенән күрер.
Яҡшы янында яман беленә.
Яҡшыға тарыҡма, яманға юлыҡма.
Яҡшыға тиң юҡ, яманға иң юҡ.
Яҡшыға һүҙ эйәрер, яманға күҙ эйәрер.
Яҡшыға эйәргән — уңыр, яманға эйәргән — туңыр.
Яҡшыға әйтһәң, белер, яманға әйтһәң, көлөр.
Яҡшыға яҡшылыҡ ҡылһаң, бише менән ҡайтарыр.
Яҡшыға яҡынлашһаң, яҡшылығы йоғор; яманға яҡынлашһаң, яманлығы йоғор.
Яҡшыға ялынһаң — малың ҡалыр; яманға ялынһаң — йәнеңде алыр.

Яҡшыға ят булмай, яманда оят булмай.
Яҡшылыҡ белмәгән кеше кешене һанламаҫ.
Яҡшылыҡ заяға китмәҫ.
Яҡшылыҡ ерҙә ятмаҫ.
Яҡшылыҡ итеү яҡшылыҡ күреүҙән яҡшыраҡ.
Яҡшылыҡ иткән — ашын ашар; яманлыҡ иткән — башын ашар.
Яҡшылыҡ иткән юлда ҡалмаҫ, насарлыҡты ат тарта алмаҫ.
Яҡшылыҡ иткән яҡшылыҡ көткән, яҡшылыҡ итмәгән ни көткән?
Яҡшылыҡ итһәң — яҡшылыҡ табырһың; яманлыҡ итһәң — яманлыҡ табырһың.
Яҡшылыҡ ҡылған — аш йыйған, яманлыҡ ҡылған — таш йыйған.
Яҡшылыҡ ҡылып диңгеҙгә ташлаһаң да ҡайтыр.

Яҡшылыҡ ҡылырға ҡулыңдан килмәһә, яманлыҡ ҡылма.
Яҡшылыҡ онотола, яманлыҡ онотолмай.
Яҡшылыҡ яу ҡайтара.
Яҡшылыҡҡа өйрән, яманлыҡтан ерән.
Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ — һәр кешенең эшелер; яманлыҡҡа яҡшылыҡ — ир кешенең эшелер.
Яҡшылыҡҡа яуызлыҡ менән яуап бирмә.
Яҡшылыҡты онотма, яманлыҡты күңелеңдә тотма.
Яҡшылыҡты хайуан да белә.
Яҡшылыҡты һатып алып булмай.
Яҡшынан ҡасма, яманға аяҡ баҫма.
Яҡшынан эш ҡала, ямандан үс ҡала.
Яҡшыны күреп фекер ит, яманды күреп шөкөр ит.
Яҡшыны эҙләп ал, насары үҙе килер.
Яҡшыны яманға һатма.
Яҡшының бер һүҙе — мең алтын.
Яҡшының ҡәҙерен яман белмәҫ.
Яҡшының үҙе үлһә, аты ҡалыр.
Яҡшының үҙе үлһә лә, һүҙе үлмәй.
Яҡшының үҙе үлһә лә, эше үлмәй.
Яман айғыр өйөрөн яуға алдырыр, яман егет юлдашын дауға ҡалдырыр.
Яман арба юл боҙор, яман кеше ил боҙор
Яман — ашҡа, яҡшы — эшкә.
Яман егет юлдашын яуға алдырыр, үҙен оятҡа ҡалдырыр.
Яман кеше яңғыҙ үлер.
Яман кешенән йәйә буйы булһа ла ҡас.
Яман килде — яу килде.
Яман кәзә тартышҡаҡ, яман әҙәм орошҡаҡ.
Яман мал янына ҡурйын бәйләтмәҫ, яман әҙәм янына кеше эйәләтмәҫ.
Яман менән көлһәң, аҙағында иларһың.
Яман менән юлдаш булма: яҡшы юлдан яҙҙырыр.
Яман менән юлдаш булһаң — ярға йығылырһың; яҡшы менән юлдаш булһаң — малға юлығырһың.
Яман тыуыр, юлды быуыр.
Яман үҙен белмәҫ, яҡшыны күҙгә элмәҫ.
Яман эт итәккә йәбешә, яман кеше яғаға йәбешә.
Яман эшенән күрмәҫ, кешенән күрер.
Яман эште яҡшылыҡ баҫыр.

Яман юлдаш яу булыр, бөтә эше дау булыр.
Яман юлдаштан яңғыҙлыҡ яҡшы.
Яман юлдашты ярты көн һаҡла.
Яман яҡшы менән дуҫлашмай.
Яманға барма, яҡшынан ҡалма.
Яманға баш булғансы, яҡшыға юлдаш бул.
Яманға йәнеңде бирһәң дә, ярамаҫһың.
Яманға йоғолма, йоғонһаң, йығылма.
Яманға үлем юҡ, яҡшыға йөрөм юҡ.
Яманға эйәргән — яҙыҡҡа, яҡшыға эйәргән — аҙыҡҡа.
Яманға әйткән аҡыл — далаға атҡан уҡ.
Яманға юлдаш булһаң, оятка ҡалырһың.
Яманға яҡшылыҡ итһәң, аңламаҫ, яҡшыға яҡшылыҡ итһәң, онотмаҫ.
Яманға ялынһаң, яңағың һыныр.
Яманға яман иш була.
Ямандан ҡас, яҡшыға һырыш.
Ямандан ҡәбереӊ йыраҡ булһын.
Ямандан яҡшылыҡ көтмә.
Ямандың ауыҙынан сыҡҡанды эт ашамаҫ.
Ямандың аяғы һигеҙ — берәһе теймәһә, берәһе тейә.
Ямандың биргән ашынан яҡшының әйткән һүҙе артыҡ.
Ямандың күперенән үткәнсе, ярҙан ос.
Ямандың ҡуйынында ятҡансы, яҡшының аяғында ят.
Ямандың түрендә булғансы, яҡшының гүрендә бул.
Ямандың уйы яман.
Ямандың үҙ бәләһе үҙенә етер.
Ямандың юлдашы ла яман.
Ямандың яҡшыһы булғансы, яҡшының шаҡшыһы бул.
Ямандың яманлығы үҙ башына ҡайтыр.
Яманлыҡ иткән изгелек тапмаҫ.
Яманлыҡ иткәнгә лә яҡшылыҡ ит.
Яманлыҡ ҡылдым да ҡотолдом тимә — алдыңа килер.
Яманлыҡ эшләп, яҡшылыҡ көтмә.
Яманлыҡҡа яманлыҡ — яҡшылыҡ, яҡшылыҡҡа яманлыҡ — шаҡшылыҡ.
Яманлыҡты күрмәгән — яҡшылыҡтың ҡәҙерен белмәгән.
Яманлыҡтың сиге бар, яҡшылыҡтың сиге юҡ.